Башҡортостан Республикаһы МР Бөрйән районы мәғариф бүлеге

# Урал



*Күпме моң бар еркәйемдә,*
*Күпме нур бар күктәремдә!*
*Тағы күпме асыл йырҙар*
*Тыуыр Урал күкрәгендә.*

*Раушл Бикбаев*

## Башҡорт халкының хәтер ҡото, тарих уты булған йәш сәсәндәр!

Мәшһүр “Урал батыр” ҡобайырына йәш йөрәк дәрте һәм зиһен яҡтылығы биргән, Йәншишмәнең тереһыуын бөрккәндәй әленән-әле үҙ халҡын тәүбашланғысына ҡайтарыусы эпос башҡарыусы балалар, уларҙы бөйөк ҡомартҡы юлына сығарыуға фатиха, илһам биреүсе хөрмәтле ата-әсәләр һәм уҡытыусылар! Рәсми рәүештә егерменсе тапҡыр үткәрелеүсе “Урал батыр” эпосын башҡарыусыларҙың юбилей бәйгеһе ҡотло булһын! Беҙ, Бөрйән районы халҡы, бөйөк ҡомартҡыбыҙҙың үҙ төйәгебеҙҙә тыуыуы менән сикһеҙ ғорурланабыҙ! Хәҙер инде бөтөн республика кимәленә күтәрелгән, эпосты яттан һөйләү конкурсының үҙ бишегендә башланғыс алып китеүе бер кемде лә аптыратмаç.

1996 йылда Бөрйән мәғариф бүлеге арҙаҡлы уҡытыусылары Клара Байназарова, Роза Ғүмәрова, Мәрйәм Ҡәҙерғолова, Марат Муллағолов етәкселегендә Шүлгәнташҡа эпостан өҙөктәр ятлаған уҡыусылар араһында тәүбашлап ярыш ойоштора. Һуңынан инде, ике тиçтә йылдар элек ул эргә-тирәләге биләмәләрҙән дә уҡыусылар йыйып, яйлап республика кимәленә күтәрелә. Яҡшы башланғыс тиҙ арала хуплау таба, йыл һайын еңеүсе районында конкурс үткәрелә башлай. Ә шулай ҙа, 2014 йылда, беҙ “Урал батыр”ҙы тыуған төйәгенә ҡайтарыуға өлгәштек. Хәҙер инде һәр юлы мәңгелек саҡырыу булған бөйөк ҡомартҡыбыҙ бәрәкәтле, илһамлы, йырлы-моңло, мөғжизәле үҙ ерендә яңғырай. Бөгөнгө мәртәбәле ярышта майҙан тоторға сыҡҡан Һомай кеүек һылыу, сая ҡыҙҙарыбыҙ, Уралдай батыр, айбарлы улдарыбыҙ, барығыҙға ла еңеү ҡомары, тел асҡысы, тән һәм йән сәләмәтлеге теләйбеҙ!

Район хакимиәте башлығы Р.Д. Шәрипов

## Хөрмәтле өмөтлө киләсәгебеҙ - йәш сәсәндәребеҙ!



Һеҙҙең барығыҙҙы ла изге Бөрйән ерендә сәләмләүебеҙгә сикһеҙ шатбыҙ. Йыл һайын иң тырыш һәм зиһенле балаларҙы йыйып “Урал батыр” эпосын ятлау сәсәнһүҙ оçталарын тағы ла оло ҡорға тупланы. Боронғолоҡтоң тәрән серҙәрен үҙендә һаҡлаған ғәжәп күркәм тәбиғәтле Бөрйәнебеҙҙә йәш талантарын асыу һәм юғары кимәлгә еткәнсе үçтереүгә ҙур көс һалабыҙ. Районыбыҙҙа мәктәпкәсә йәштәге балаларҙың рухи һәләтен үçтереү буйынса ла күп саралар үткәрелә: балалар баҡсаһына йөрөүселәр араһында уҙғарылған “Урал батыр” конкурсында 2-3 йәшлек кенә бәпәйҙәрҙең дә илһамланып ҡобайыр юлдарын ятлап тороуы, әлегә хәреф тә танымаған тәрбиәләнеүселәрҙең ата-әсәләре һәм остаздарының тырышлығы менән ҡобайырҙағы ваҡиғаларҙы ҡабул итә алып тамашасыға еткерә алыуы әйтеп аңлатҡыһыҙ һоҡланыу тойғолары уята.

Быйыл мәғариф бүлеге тарафынан тәү тапҡыр мәктәпкәсә йәштәгеләрҙең “Өмөтлө киләсәк” форумы ойоштороп тағы ла бер башланғыс юл алды, бик күп йәш талантар асылды. Халҡыбыҙ элек-электән киләсәген рухи тәрбиәләүгә ҙур иғтибар биргән. Йәш сәсәндәр бәйгеләрен көсөн дә ваҡытын да йәлләмәгән ойоштороусыларҙың хеҙмәте лә оло хөрмәткә лайыҡ. Ә һеҙгә, ҙур бәйгелә ҡатнашыусылар, рухи ныҡлыҡ һәм эпосыбыҙҙың асылын тамашасыларығыҙға еткерә алырлыҡ һүҙ көсөнә эйә булыуығыҙҙы теләйбеҙ!

Район мәғариф бүлеге етәксеһе Р.Б. Шәрипов

**Әңгәмә:**



Һеҙҙең иғтибарығыҙға “Урал батыр” эпосын төрлө йылдарҙа тулыһынса ятлап юғары уңышҡа ирешкән сәсәндәребеҙ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ, әңгәмәгә ҡушылырға теләк белдереүселәргә өсәр һорау бирҙек:

**1.”Урал батыр” эпосын нисәнсе йылда һәм нисә юл ятлап дан алдығыҙ?**
**2.Мәшһүр эпосыбыҙың асылын белеүҙең тормошта файҙаһы тейҙеме?**
**3. Әлеге ваҡытта ҡобайыр юлдарын иҫләйһегеҙме?**

**<u>Венера Баймөхәмәтова, Әбйәлил районы:</u>**

**1.** "Урал батыр" эпосын 2001 йылда Бөрйән районында тулыһынса ятлап ишеттерҙем. Шуға өҫтәп инглиз һәм рус телдәренә тәржемәләрҙән дә өҙөктәр өйрәнгәйнем.
**2.** Эпосты яттан белеүҙең файҙаһы күп тейҙе. Ул йылдарҙа бәйгенән һуң ЮНЕСКО идаралығы Европа буйлап сәйәхәт-экспедицияла ҡатнашыу бәхетен бүләк итте. Унда беҙ үҙебеҙҙең мәҙәниәт һәм мәшһүр ҡомартҡылар менән халыҡты таныштырҙыҡ. Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингәс, курс һәм диплом эштәремде лә “Урал батыр”эпосы буйынса яҙҙым һәм уңышлы яҡланым. Әле диссертациямды ла шул уҡ темаға әҙерләйем.
**3.** Ҡобайыр юлдарын яҡшы иҫләйем.

**<u>Наҙгөл Салауатова, Бөрйән районы:</u>**

**1.** 2004 йылда, 1754 юл ятланым, республика конкурсында 1 урын яуланым
**2.** Эпостын асылын белеу, шул конкурстарза ҡатнашыу рухты үҫтерә. Һәр башҡорт эпостың йөкмәткеһе менән таныш булырға тейеш тип уйлайым.
**3.** Беренсе 30-40 юлын иҫләйем, башҡалар ятлаһа, ҡушылып китә алам.

**<u>Миләүшә һәм Гөлназ Ильясовалар (апалы- һеңлелеләр), Ауырғазы районы:</u>**

**1.** 2003 йылда Баймаҡ районында Талкаҫ күле буйында Гөлназ 4000 юл ятлап, 1 урын, икенсе йылына Миләүшә Ейәнсурала Гран-при яулай, ҡобайырҙы тулыһынса һөйләне.
**2.** Эпосты тотош ятлау зиһенде үҫтерҙе тип уйлайбыҙ.
**3.** Оҙаҡ ваҡыт нисәнсе юл ниндәй биттә икәне хәтерҙә һаҡланды. Мәктәпте тамамлап сығып киткәс тә, ҡобайыр ятлап сығыш яһарға тура килгеләне. Уны оноторлоҡ түгел.

**“Урал батыр”** Урал батыр булып яңғырарға тейеш тип иҫәпләй республика кимәлендә 20-се тапҡыр үткәрелеүсе конкурстың абруйлы жюрийы ағзаһы **Нәркәс Әхмәт ҡыҙы Сөләймәнова –Хөббөтдинова**.

Нәркәс Хөббөтдинова - филология фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө федераль тикшеренеү үҙәге Тарих һәм тел әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре. Хәҙерге көндә яңы технологиялар нигеҙендә башҡорт әҙәбиәтен интертекстуаль теория күҙлегенән сығып өйрәнеү йүнәлешендә эшләй, йәғни глобаллаштереү осоронда халҡыбыҙ әҙәбиәтенең башҡа әҙәбиәттәр араһында юғалып ҡалмаҫлыҡ яҡтарын асыу өҫтөндә эҙләнеүҙәр алып бара.

**Иғтибарығыҙға 200-гә яҡын ғилми хеҙмәттәр, шул иҫәптән 6 монография авторы, Башҡортостан Республикаһының мәғариф отличнигы, ғалимә яҡташыбыҙ менән әңгәмә тәҡдим итәбеҙ.**

***- Ғилем донъяһына тәүге аҙымдарығыҙ, ғалимлыҡ юлын башлауығыҙ менән таныштырып үтһәгеҙ ине.***

- Ғалим ғаиләһендә тәрбиәләнһәк тә, атайыбыҙ беҙгә киләсәккә бер ниндәй ҙә күрһәтмәләр, кем булырға кәрәклеген әйтеп кәңәштәр бирмәне. Иҫ белгәндән алып, бер стенанан икенсеһенә, иҙәндән алып түшәмгә тиклемге кәштәләрҙә урынлашҡан өй китапханаһында ҡаҙынып үҫтек. Шуға ла үҙебеҙҙән үҙебеҙ фән донъяһына тартылғанбыҙҙыр. Апайым философия өлкәһен, ағайым һынлы сәнғәтте үҙ итһә, миңә әҙәбиәт донъяһы яҡыныраҡ булды. 80-90 йылдар... Ул ваҡытта компьютер замана түгел. Беҙ, өйҙәгеләр, кемуҙарҙан хәреф баҫыу машинкаһында атайым бөртөкләп йыйған халыҡ ижады өлгөләрен баҫмаға әҙерләйбеҙ, текст итеп әҙерләйбеҙ, уҡып ҡарайбыҙ, төҙәтәбеҙ. Әкиәттәр, легенда-риүәйәттәр, ғөмүмән, халҡыбыҙҙың ижад гәүһәрҙәре менән шулай таныштыҡ. Ата-әсәйебеҙҙең тырышлығын, ныҡышмаллығын күреп үҫеү беҙҙә лә шул сифаттарҙы тәрбиәләгәндер.

Ғилем донъяһына фольклор аша юл табыуым осраҡлы түгел тип иҫәпләйем. Докторлыҡ диссертацияһында “XIII-XX быуатта башҡорт әҙәбиәтендә фольклорҙың художестволы-эстетик яҡтыртылышы” темаһын яҡтыртыуым да шул мөхиттә үҫеүеүемә бәйле. Ғөмүмән, үҙемде хеҙмәт юлымда бик бәхетлеләрҙән һанайым: сөнки остаздарым-һәр саҡ изге кәңәштәренән яҙҙырмаусы атайым һәм фәнни эшемдең етәксеһе оло ғалимыбыҙ Ғайса Хөсәйенов һабаҡтарын алып эшләнем.

***- Йәш быуындың киләсәгенә ҙур яуаплылыҡ менән ҡараған арҙаҡлы яҡташыбыҙ педагогик һәм фәнни хеҙмәтте бергә уңышлы атҡара: Нәркәс Әхмәт ҡыҙының да аспиранттары һәм магистранттары бөгөнгө көндә фән тауына үрләй.***

-Эйе, хәҙер үҙем дә киләсәк быуынды ғилем юлына әйҙәй алыуыма шатмын, әлеге көндә минең етәкселегемдә ике аспирантым, Учалы һәм Әбйәлил районы егеттәре, ныҡышып фән серҙәрен өйрәнә. Уларға ла мине уҡытыусыларым нисек өйрәткән, шулай тәжрибәмде тапшырырға тырышам.

***- Бөрйән районында өсөнсө йыл рәттән мәктәпкәсә йәштәге балалар араһында ла “Урал батыр” сәсәндәр конкурсы үткәрелә. Ошо башланғыстың республика кимәленә лә сығыуына ҡарашығыҙ?***

- Әлбиттә, балалар баҡсаһы йәшенән үк бөйөк эпосыбыҙ менән таныштырыу-яҡшы күренеш. Тик бында бик күп нескәлектәрҙе күҙ уңында тоторға кәрәктер. Әйтәйек, йыл һайын “Һаумы, һаумы, әкиәт!” конкурсы ла уңышлы үткәрелә килә ул. Ә был бит-эпос, ни тиклем күләмле ҡобайыр. Бында баланың ниндәй кимәлдә әҫәрҙе ҡабул итә алыуы ҙур роль уйнай. Республика кимәлендәге “Урал батыр” конкурсында әле ҡайһы бер уҡыусылырҙың автоматик рәүештә шиғри юлдар итеп ятлауы, был әҫәрҙең асылын аңламауы күренә. Концерт түгел бит ул, тамаша күрһәтеп сығып китергә, йәки ҡатнашты тип билдәләнеү алырға, беҙгә ысын сәсәндәр табырға, уларҙың һәләтен үҫтереүҙе маҡсат итеп ҡуйып өйрәнергә кәрәк. Шуға мәктәпкәсә йәштәге балалар менән эшләгәндә лә иң тәүҙә баланың психологик торошон дөрөҫ тойомлау урынлыҙыр тип уйлайым. Ә республика кимәлендә үткәреүгә килгәндә, барыһы ла ойоштороу йәһәтенән уңышлы юлдар табыуға ҡайтып ҡала инде.

***- Меңдәрсә йыл элек ижад ителгән “Урал батыр” эпосындағы һабаҡтар менән егерме беренсе быуат балаларын тәрбиәләп буламы? Быйылғы конкурсты үткәреүҙең үҙенсәлектәре бармы?***

- “Урал батыр” әлеге ваҡытта ла, бынан алда ла бик күп тикшеренеүҙәр аша “нигеҙендә тәрбиәүи алым ята” тип танылыу алған бөйөк ҡомарткыбыҙ. Әлеге ваҡытта ла әҫәрҙән һәр йәштәге балалар өсөн дә, оло йәштәге кеше өсөн дә әхлаҡи фәһем алырға була, сөнки Кешелеклек ҡиммәттәре иҫкермәй. Бары тик бында уҡытыусының дөрөҫ итеп уҡыусыһының күңеленә маҡсатын еткерә белеүе кәрәк. Эпосты ҡабул иткәндә уңышлы адаптация аша үтһә, бала уны аңлаясаҡ. Әйтәйек, һүрәттәр ашамы, слайдтар ярҙамындамы, хәҙер мөмкинлектәр күп бит, эпостың асылына хилафлыҡ килтермәй генә шуны тәрбиәләнеүсенең күңеленә һалыу - уҡытыусының уңышы.

Яңылыҡтарға килгәндә, улар бар. Цифрлы технологиялар заманында йәшәйбеҙ. Шуға зональ конкурсты ла беҙ видеояҙмалар аша баһалап, республика кимәлендәге ярышҡа ла иң-индәрҙе генә йыйырға булдыҡ. Был конкурс барышындағы эште бермә бер еңеләйтәсәк.

***- Конкурс барышы менән ризаһығыҙмы? Ниндәй яңылыҡтар индерер инегеҙ?***

- Был тәңгәлдә уйландырырлыҡ мәсьәләләр бар, минеңсә. Тик уны бергәләп, энәһенән ебенә тиклем тикшереп хәл итеү кәрәктер. Мәҫәлән, конкурстың исеменә ярашлы, бында бары тик тыуған бишегенә ҡайтҡан мәшһүр ҡобайырыбыҙға ғына мәҙхиә йырланырға тейештәр тип уйлайым. Шундай уҡ фекер белдергән башҡа жюри ағзалары ла булды. Һәр эпос, ҡобайыр үҙ төйәгендә йырланһын. Бәлки, театрлаштырылған тамашаларға айырым берәй конкурс булдырыу яғын ҡарарға кәрәктер. "Урал батыр" Урал батыр булып ҡалһын ине. Мөхәммәтша Буранғолов яҙып алғанда данлыҡлы сәсәндәребеҙ ниндәй кимәлдә һөйләгән, эпосыбыҙҙы әле лә шулай итеп тыңлаусыны аһ иттерлек сәсәндәребеҙҙе табыу кәрәк.

***- Үҙ төйәгенә ҡайтҡан тигәндәй, егерме йыл элек Бөрйәнендә матур башланғыс алып яңынан тыуған ерендә ауаз һалған "Урал батыр" ҙың тик бер районда ғына үткәрелеп килеүенә нисек ҡарайһығыҙ?***

- Мин саҡ икенсе йыл конкурста жюри ағзаһы булараҡ ҡатнашам, атайым һәр ҡайһы районда үткәрелгән ярыштан һуң үҙ тәҫьораттары менән уртаҡлаша торғайны. Шунан сығып әйтә алам, республика кимәлендәге сараны һәр ҡайҙа ла күркәм итеп ойоштороға тырышалар. Бөрйәндә үткәрелеүе, әлбиттә, бик яҡшы. Ойоштороусылар, район өсөн был бик яуаплы эш. Финанслау, һәр йәһәттән хәстәрләү еңел түгелдер. Эпосыбыҙҙың ошолай йәнле һәм йәмле булып халҡыбыҙ аңында һаҡланыуына, күркәм рәүештә киләсәк быуынға тапшырылыуына хәленән килгән һәр кем үҙ өлөшөн индерһен, булышлыҡ итһен ине тигән теләктә ҡалам.

***- Конкурста ҡатнашыусыларығыҙға теләктәрегеҙ.***

- Сәсәнлектә ярышыусыларға ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек менән ҡоралланыуҙарын, алдарына ҡуйған маҡсаттарына ирешеп, тамашасыларға бөйөк "Урал батыр" ҙы үҙ һутында еткерә алыуҙарын теләйем. Уңыштар һеҙгә!

***- Әңгәмәгеҙ өсөн рәхмәт!***



## Шүлгән мәмерйәһе менән танышыу



Башҡортостанда йөҙҙән ашыу мәмерйә бар. Шуларҙың иң боронғоһо, яңынан яңы серҙәре менән таң ҡалдырғаны - Урал йөрәгендә урынлашҡан Шүлгәнташыбыҙ. 1959 йылда ҡаяға төшөрөлгән һүрәттәр табылғандан алып мәмерйә менән ҡыҙыҡһыныусылар арта бара. Унда мамонт, ҡырағай ат, мөгөҙ-морон, үгеҙ, бизон кеүек хайуандарҙың, бал ҡортоноң һүрәттәре урын алған, ул осор өсөн бик хас булмаған кеше һындары ла осрай. Тәүтормош кешеләренең һүрәттәр галереяһы беренсе ҡаттың ике стенаһында һәм икенсе ҡаттың ҙур залында урынлашҡан.
Һүрәттәр ҡыҙыл буяу, ҡыҙҙырылған майҙа иҙелгән охра менән яһалған. Тикшеренеү алып барыусы ғалимдар раҫлауынса, Шүлгәнташ мәмерйәһендәге һүрәттәрҙең максималь — 36400 йыл, минималь - 14500 йыл элек төшөрөлгәнен билдәләне.

Мәмерйә ауыҙында Зәңгәр күл бар. Һыуы үтә күренмәле булғанға уны шулай атағандар. Зәңгәркүл бер ваҡытта ла туңмай. Һыуҙың температураһы йәй алты, ҡыш дүрт градус йылылыҡта була. Шүлгәнташты күрергә килеүселәрҙең иң яратҡан урыны ул мәмерйә ауыҙы: һалҡынса саф һауаһы менән күкрәк тултырып тын алыу, көмөштәй саф һыуы менән сайыныу йәнгә сихәт бирә. Ә алда мөғжизәләр доньяһы көтә.

Мәмерйә эсендә халҡыбыҙҙың мәшһүр "Урал батыр"ының һәр образын табырға була. Ҡышын төрлө ҙурлыҡтағы һәм формалағы сталагмиттар тылсымлы кәүҙәләнештәр барлыҡҡа килтерә: ниндәйҙер мәлгә ҡатып ҡалған ҡот осҡос Ҡәһҡәһә һәм уның иге-сиге булмаған ғәскәре ташланыр кеүек, Гәлсәр залдағы ҙур һарҡыуҙар Аҡбуҙаттың ялын хәтерләтә. Ғөмүмән, һәр таш, һәр тупһа ниндәйҙер боронғо хикәйәт һөйләй төҫлө.

Шүлгәнташ үҙендә әллә күпме асылмаған серҙәр һаҡлай. Мәмерйә йөрөткән атама «юғалған», «юҡҡа сыҡҡан» тигән мәғәнәгә тура килә. «Урал батыр» эпосында ла бындағы күлдәрҙең төбө юҡ һәм улар үҙ-ара Ер аҫты батшалығы менән тоташҡан, тиелә. Ысынлап та, мәмерйә үҙенең килеп сығышы менән йөҙәр йылдар буйы аҡбур массивтары аша үтә торған урындарҙы йыуған, тау эсендә бер нисә ярус булып урынлашҡан ер аҫты ҡыуышлыҡтарын өңөп эшләгән Шүлгән йылғаһына бурыслы. Ер аҫты батшалығы хакимы Шүлгән һәм уның дейеүҙәре тау эсендә Аҡбуҙат өсөн таш йорт ошо Шүлгәнташты төҙөгәндәр тигән уйҙырмалар ысынбарлыҡҡа тап килә. Эргә–тирәләге атамалар ҙа тотош эпоста сағылыш таба.

Барлыҡ туристарҙың, килгән ҡунаҡтарҙың күңелен ымһындырып үҙенә тартҡан Шүлгәнташ мәмерйәһе "Урал батыр"ҙы данлаусы йәш сәсәндәрҙе үҙендә көтә!



**Бөрйән ырыуы йыйынына**

Мәсем тауҙан,Баҙал һәм дә Юрматауҙан,
Ағиҙелдән, Үҙән һыуҙан һәм Нөгөштән,
Атай-олатай төйәк иткән Шүлгәнташтан
Сәләм һеҙгә, ырыуҙаштар — ҡан-ҡәрҙәштәр!
Гүзәллеккә тиңе булмаҫ шул яҡтарҙан
Килдек бына, йән тартмаһа, ҡан тарта, тип.
Һәр эштә лә арҡа терәр дуҫтар кәрәк —
Осрашҡандан, күрешкәндән дуҫ арта, тип.
Хандар, бейҙәр заманынан бөгөнгәсә
Йәбер-золом аҙ күрмәне беҙҙең ерҙәр.
Халкым, телем, ер-һыуым, тип, ут йотоп
Башын һалды аҫыл-аҫыл күпме ирҙәр.
Үҙен үҙе хөрмәт иткән бар милләттәр
Уянғанда, тиңлек даулап ҡуҙғалғанда,
Йоҡлап ҡалһаҡ , унын һуңы бөтөү булыр
Һандуғаслы талыбыҙға ҡоҙғон ҡуныр.
Кәңәшле эш — тарҡалмаҫ, ти боронғолар
Кәңәшләшеп алайыҡсы, дуҫ-туғандар!

Самат Ғәбиҙуллин, 1996 йыл

